Тема:

# Ҡырағай хайуандар
(Урман йәнлектәре)

Маҡсат:

Ҡырағай хайуандарҙы (урман йәнлектәрен) белдергән һүҙҙәрҙе үҙләштереү; телмәр һәләтлектәрен, фекерләүҙе үҫтереү; ҡырағай хайуандарҙы һаҡлау, уларға ҡарата шәфҡәтле булыу кеүек сифаттар тәрбиәләү.

Йыһазландырыу:

Йорт хайуандары һәм урман йәнлектәренең һүрәттәре.

## Дәрес барышы

I. Ойоштороу моменты

Төҙөҫ итеп ултырҙыҡ
Дәрес башлана хәҙер
Уҡытыусыны тыңларға
Беҙ һәр ваҡыт әҙер.

II. Дәрестең маҡсатын әйтеү

— Бөгөн дәрестә урман йәнлектәре менән танышасаҡбыҙ һәм "Йомро икмәк" әкиәтенең йөкмәткеһе өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ.

III. Динамик күнегеүҙәр
— Дәресте динамик күнегеүҙәрҙән башлап ебәрәйек.
1) Тын юлына күнегеүҙәр
— паровоз геүелдәй — у-у-у
— йылан ыҫылдай — ҫ-ҫ-ҫ
— шарҙың тынын сығарабыҙ — ш-ш-ш
— эҫе сәйҙе өрөп һыуытабыҙ — өф-өф-өф
2) телдәргә күнегеүҙәр
— түбә буяу
— теш тәрҙе таҙартыу
— телде туҡмау
— телде сапҡылау
— аттар килә

3) 6 рычаг буйынса эш (сәп-сәп-сәпәкәй...)

Ярай, афарин уkыусылар.

IV. Үткән материалды kабатлау

(йорт хайуандары)

– Йорт хайуандарының һүрәттәрен күрһәтеү һәм уларҙың ниндәй өндәр сығарып kысkырыуын әйтеү.

(һыйыр, сыуkа, кәзә, һарыk, эт, бесәй, ат).

V. Яңы тема өçтөндә эш

"Йомро түңәрәк" (колобок) әкиәте менән таныштырыу.

1. – Балалар, хайуандар йорттарҙа ғына йәшәйҙәрме? Әллә тағы ла башkа бүтән ерҙәрҙә йәшәгән хайуандар ҙа бармы?

– Kырағай хайуандар.

– Улар kайҙа йәшәйҙәр, уларҙың йорттары бармы? (Урманда йәшәйҙәр).

– Ә беҙҙең урмандарҙа ниндәй хайуандар (йәнлектәр) йәшәй? Кем әйтә?

(Айыу, бүре, төлкө, kуян, тейен, терпе, мышы).

– Ә хәҙер ошо йәнлектәр тураһында әкиәт тыңлап алайыk.

– "Колобок" әкиәтен һеҙ барығыҙҙа беләһегеҙ эйеме? Ә башkортса Колобок нимә була ул? (Йомро икмәк).

2. Әкиәт һөйләү

– Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән. Бабай әбейгә йомро икмәк бешерергә kушkан. Әбей kалған онон йыйып алып, kаймаkлап kамыр баçkан. һәм мейестә йомро икмәк бешереп алған. Икмәкте тәҙрә төбөнә һыуытырға kуйған. Йомро икмәк тәҙрә төбөндә

ятkан-ятkан да ергә тәгәрәп төшкән һәм юл буйлап тәгәрәп киткән. Тәгәрәп бара торғас уға *kуян* осраған.

1) Kуян әйткән: – Йомро икмәк! Мин һине ашайым.

– Ашама мине kуян, мин һиңә йыр йырлайым.

– Мин әбейҙән дә kастым,

Бабайҙан да kастым,

Хәҙер һинән дә kасам, kуян,

– тигән дә артабан тәгәрәп киткән.

2) тейен
3) бүре
4) айыу
5) терпе
6) төлкө

– һаумы йомро икмәк, миңә йыр йырла әле. (Йырлай).

– Йомро икмәк, мин kартайҙым шул, kолаkтарым насар ишетә. Танау осома ғына ултырып йырламаçһың микән.

Йомро икмәк уның танау осона ултырып йырын башлауы була, төлкө уны йота ла kуя.

3. Хайуандарҙың (йәнлектәрҙең) исемдәрен kабатлау, нығытыу.

– Был нимә? (Айыу, бүре, ...)

4. Сәхнәләштереү, ролләп әкиәтте балаларҙан һөйләттереү (баштарына, йәнлек һүрәтен кейеп).

– йомро икмәк

– хайуандар (kуян, тейен, бүре, айыу, терпе, төлкө).

VI. Йәнлектәрҙе сағыштырыу

1)

| төлкө | kуян |
| --- | --- |
| kыҙғылт һары | аk, һоро |
| kолағы kыçkа | kолағы оҙон |
| kойроғо оҙон | kойроғо kыçkа |
| хәйләкәр | kурkаk |
| йүгерә | һикерә |

– Нимә менән туҡлана?

ҡуян, тауыҡ, балыҡ, hарыҡ, ҡаҙ — кишер, кәбеҫтә

2) Яңылыш яҙылған исемде табығыҙ (I-II рәт)

| | |
|---|---|
| айыу | кәҙә |
| бүре | hарыҡ |
| *hыйыр* | ат |
| ҡуян | *бүре* |
| төлкө | сусҡа |

VII. Нығытыу күнегеүҙәре

1) Урман һәм ишек алды һүрәте.

Уҡыусылар хайуандарҙың һүрәттәрен тейешле урындарға ҡуялар (I-II рәт).

2) Китаптағы һүрәт менән эш.

Йәнлектәр нимә менән туҡланалар?

3) Маскалар менән эш

М: – Ҡуян кишер ашай.

– Айыу бал ярата.

4) Төлкө тураһында шиғыр ятлау

– Ҡойроғо көлтә
Хәйләкәр үтә.
Эҙен артынан
Һеперең үтә.

Пушистый хвост
Очень хитрый
И подметает
За собой след.

VIII. Ҡыҙыл китапҡа ингән йәнлектәр менән таныштырыу. (Ҡыҙыл китапты күрһәтеү).

– Балалар, был нимә ул? (Китап)

– Ниндәй китап? (Ҡыҙыл)

– Был китапҡа хайуандарҙың һирәк төрҙәре индерелгән. Улар хөкүмәт тарафынан һаҡланалар.

– Ҡайһы бер йәнлектәр бөтөп баралар (ни өсөн?). Сөнки уларҙы аталар, үлтерәләр (ни өсөн?).

– Ҡиммәтле тиреләре өсөн. – Уларҙың тиреләрен нимә эшләтәләр? (Башлыҡ, тун, шубалар тегәләр, яға итеп ҡуялар).

– Беҙҙең урмандарҙа йәшәгән йәнлектәрҙе беҙ нисек һаҡларға тейешбеҙ?

– Уларҙы ҡурҡытмаҫҡа, таш бәрмәҫкә, баҫтырмаҫҡа, балаларын алмаҫҡа, өйгә алып ҡайтмаҫҡа тейешбеҙ

IX. Дәфтәрҙәргә яҙыу

Ҡуян менән шыршы һүрәтен эшләү.

X. Йомғаҡлау, баһалау

XI. Өйгә эш.

“Йомро икмәк” әкиәтен һөйләргә әҙерләнергә.